**КРИТЕРИИ И СИСТЕМА ОЦЕНИВАНИЯ**
**ЧАСТЬ 1. БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

| Ответы | Критерии | Баллы |
|---|---|---|
| **Задание 1.**<br>Фонетика – тел ғилеменең телмәр өндәре һәм уларҙың яһалышын өйрәнгән бүлеге.<br>Лексикология – телдәге бөтә һүҙҙәр йыйылмаһын, һүҙҙәрҙе, уларҙың тәбиғәтен, үҙ-ара бәйләнешен өйрәнә торған бүлек .<br>Синтаксис – тел ғилеменең һүҙбәйләнештәрҙең һәм һөйләмдәрҙең яһалыу юлдарын, уларҙың төҙөлөшөн өйрәнгән бүлеге.<br>Башҡа бүлектәр: Морфология, фразеология, орфография, орфоэпия, пунктуация һ.б. | **по 1 баллу** – за каждый правильно указанный термин | **3 балла** |
| **Задание 2.**<br>Көйә – ҡайғыра; күп мәғәнәле һүҙ: йән көйә, табала бәрәңге көйә, эҫелә үлән көйә – күсмә мәғәнәлә ҡулланылған. | **по 1 баллу** – за каждоеправильное определение значения | **3 балла** |
| **Задания 3.** | **по 1 баллу** – за каждый | **3 балла** |

| | | |
|---|---|---|
| Күплек ялғауы, эйәлек һәм урын-ваҡыт килеш ялғауҙары | правильно указанный аффикс | |
| **Задание 4.**<br>Төп килеш Балаларым<br>Эйәлек килеш Балаларымдың<br>Төбәү килеш Балаларыма<br>Төшөм килеш Балаларымды<br>Урын-ваҡыт килеш Балаларымда<br>Сығанаҡ килеш Балаларымдан | **по 1 баллу** – за каждый правильно указанный аффикс | **6 баллов** |
| **Задание 5.**<br>*Һөнәре* – исем, башланғыс формаһы – һөнәр, уртаҡлыҡ исем, төп килештә, берлектә, 3-сө зат эйәлек ялғауы ҡабул иткән, яһалышы буйынса тамыр һүҙ, һөйләмдә эйә булып килгән. | **по 1 баллу** – за каждый правильно указанный термин | **4 балла** |
| **Задание 6.**<br>Хыялланыу – исем ҡылым<br>тыңлап – хәл ҡылым<br>тороусы – сифат ҡылым<br>көлөп – хәл ҡылым | **по 1 баллу** – за каждый правильно указанный вид глагола | **4 балла** |
| **Задание 7.**<br>Оҡшатыу һүҙҙәре, рәүеш хәле булып киләләр | **1 балл** – за верно указную часть речи | **2 балла** |
| **Задание 8.**<br>1-се һөйләм 2-се һөйләмгә *кайҙа – шунда* парлы мөнәсәбәтле һүҙҙәр ярҙамында бәйләнгән, 2-се һөйләмдең 3-сө һөйләмгә бәйләнеү сараһы – интонация, йәғни көттөрөү паузаһы. | **по 1 баллу**– за верно указанный вид связи между частями предложения | **3 балла** |
| **Задание 9.**<br>Был һөйләмдә ҡылым юҡ | **1 балл -** за полный правильный ответ | **1 балл** |
| **Задание 10.**Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм | **1 балл** – за все верно указанные виды связи между частями предложения | **2 балла** |
| **Задание 11.**Мәҫәлән, “Башҡорт теленең һүҙлеге”ндә был һүҙҙең 7 мәғәнәһе бирелеп, уның менән яһалған 20-ләп фразеологик берәмек теркәлгән (М., 1993, 338-339-сы биттәр).<br>З.Ғ.Ураҡсиндың “Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге”ндә 60 фразеологик берәмек бирелгән (Өфө, 1996, 230-236-сы биттәр):<br>Тел асҡысы, тел асылыу, тел асыу, тел ауыҙға һыймау, тел барыу, тел әйләнеү, тел биҫтәһе, тел болғау, тел бәйләнеү, телгә алыу, телгә бөткән, телгә килеү, телгә һалышыу, телде арҡыры тешләү, телде йотоу, телдең һөйәге юҡ, телде тешләү, телде тыйыу, телдән ҡалыу, телдән табыу, телдән төшмәү, телдән ҡалыу, телдән яҙыу, теле ауыҙына һыймай, теле менән тирмән тарта, теленә шайтан төкөргән, телен | **по 1 баллу** – за каждоеправильное определение значения | **5 баллов** |

| | | |
|---|---|---|
| ҡыҫҡартыу, телеңде йоторлоҡ, телер ҡалыр инеме, телеңә тилсә сыҡҡыры, теле оҙон, теле осло, теле үткер, теле сарлап ҡуйған кеүек, теле телгә йоҡмай һ.б. | | |
| **Задание 12.** *Бөтә тирә-як: тауҙар, таштар, ағастар, үләндәр, сәскәләр, йәнлектәр, ҡош-ҡорттар – бөтәһе лә ҡояш сығасағын һиҙгән төҫлө, тынысланып, иркен һулыш алып ебәрҙеләр.*(М.Кәрим). | **1 балл -** за каждый верно указанный знак препинания | **4 балла** |
| **Задание 13.** Эйәлек килештә | **2 балла** - за полный правильный ответ | **2 балла** |
| **Задание 14.**Был һөйләмдә тиң киҫәктәр юҡ | **2 балла** - за полный правильный ответ | **2 балла** |
| **Задание 15.** Өс һөйләмдән төҙөлгән | **6 баллов** - за полный правильный ответ | **6 баллов** |
| **Максимальный балл за все задания – 50 баллов** | | |

## ОТВЕТЫ И СИСТЕМА ОЦЕНИВАНИЯ
## ЧАСТЬ 2. БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА

| Ответы | Критерии | Баллы |
|---|---|---|
| **Задание 1.** *Халыҡ ижады* – киң мәғәнәһендә халыҡ аҡылы һәм ҡулы менән тыуҙырылған бөтөн мәҙәни мираҫ. Йәғни, халыҡтың бөтә һөнәр оҫталығын, матди мәҙәниәт байлығын туплаған өлкә. Тарыраҡ мәғәнәһендә ул – телдән телгә күсә килгән һүҙ сәнғәте. (2,5 балл).<br>*Яҙма әҙәбиәт* – әҙәби телдә йәшәгән, конкрет авторҙың донъяға ҡараштарын, идеалдарын, тормош концепцияһын үҙендә йөрөткән ижад (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 2.** *Йәнәшәлек* – ниндәйҙер үҙенсәлеге менән бер-береһенә оҡшаш йәки бер нисә күренеште йәнәш ҡуйып һүрәтләүгә нигеҙләнгән фигура. Был алым бигерәк тә халыҡ ижадында, йырҙарҙа, ҡобайырҙарҙа, таҡмаҡтарҙа, мәкәлдәрҙә йыш осрай. (2,5 балл). Үрҙәге йырҙың тәүге ике юлында тәбиғәт күренештәре һүрәтләнә, ҡалғандарында – тәүге ике юллыҡ менән оҡшашлыҡ, мәғәнәүи уртаҡлыҡ булдырылып, кеше тормошондағы хәл-ваҡиғалар тасуирлана. (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 3.** Лиро-эпик жанрҙар – үҙҙәренең тәбиғәте менән бер үк ваҡытта лирикаға ла, эпоска ла ҡараған әҫәрҙәр төркөмө (2 балл.*)* *Поэма* – сюжет-хикәйәләүгә ҡоролған ҙур күләмле шиғри әҫәр(1 балл). *Баллада* – ҡырҡа драматик сюжетлы, | За каждый правильный ответ - 2+1+1+1 балла | **5 баллов** |

| | | |
|---|---|---|
| йырға яҡын, күберәк героик йәки тарихи тематикалы, юғары эмоциональ-экспрессив йөкмәткеле шиғри әҫәр (1 балл). *Нәҫер* – эмоционаллеге, ритмлылығы менән шиғри телмәргә яҡын торған лирик-патетик йөкмәткеле кескәй прозаик әҫәр. Унда сюжет, уны хәрәкәткә килтереүсе эпик герой юҡ кимәлендә була (1 балл) | | |
| **Задание 4.** *Романтизм* – авторҙың теләк-хыялында ғына булыуы мөмкин булған күренештәрҙе тасуирлауға ҡоролған ижад методы. Хыялдағы бәхеткә, уй-фекерҙәге идеалға ҡарап ашҡынып йәшәү, шул ынтылыштарҙы художестволы образдар аша һынландырыу (2,5 балл). *Сентиментализм* – шәхси тормош һәм тәжрибә аша ижтимағи күренештәрҙе сағылдырыуға ҡоролған ижад методы (2,5 балл) | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 5.** Текст *очерк* стилендә яҙылған, публицистик формалы. (2,5 балл). Унда башҡорт халҡының көнкүреше тарихи-этнографик планда яҡтыртыла (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 6.** Әҫәрҙән алынған өҙөктә *иҫтәлек алымы ҡулланылған*, хәтирәләрҙән ғибәрәт (2,5 балл). Сөнки унда ретроспектива көслө, хикәйәләүсе үҙенең тормошонда булған хәл ваҡиғаларҙы иҫенә төшөрә, улар беренсе заттан, шаһитлы үткән заманда тасуирлана (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 7.** Ғәлимов Сәләм – совет осоро әҙәбиәтенең күренекле вәкиле, йәш комсомол яҙыусыһы. Уның бөтөн ижады шул совет ысынбарлығына дан йырлау менән һуғарылған (2,5 балл). Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында совет осоро тарихта ҡала, онотолған, республика автономияһы, үҙаллылыҡ өсөн көрәшеп йөрөгән шәхестәрҙең исемдәре кире халыҡҡа ҡайтарыла. Ш.Бабич – ижади оҫталыҡ, ҡаһарманлыҡ, илһөйәрлек һәм телһөйәрлек символына әүерелә. Илдә идеология үҙгәрә (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 8.** Мостай Кәримдең “Ай тотолған төндә” трагедияһынан Диуана образы (2,5 балл). Диуана булыуына ҡарамаҫтан, был геройҙың әҫәрҙә тотҡан урыны бик ҙур. Ул Тәңкәбикә, Дәрүиш, Аҡйегет, Зөбәржәт һымаҡ образдарҙың тәбиғәтен тәрәндән асып биреүгә ныҡ | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |

| | | |
|---|---|---|
| ярҙам итә (2,5 балл). | | |
| **Задание 9.** Ғ.Сәләмдең "Бала" поэмаһының геройҙарының береһе Әршит – совет йәмғиәтенең төп нигеҙе булған ғаилә ҡиммәттәрен инҡар итеүсе, тик үҙең өсөн генә йәшәү кәрәклеген раҫлаусы кире тип (2,5 балл). "Әршитселек" сире менән ауырыусылар бөгөнгө йәмғиәттә лә бар. Уларҙың серек фәлсәфәһе бөгөнгө йәмғиәт өсөн дә бик зыянлы. (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 10.** *Кульминация* (2,5 балл). Сөнки әҫәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙың иң көсөргәнешле мәле тасуирлана. Дошмандар менән бәрелеш киҫкенләшкәндән-киҫкенләшә килеп, иң юғары нөктәһенә күтәрелә. Александр Матросов ҡаһарманлығы ул – һуғыш осоронда күрһәтелгән иң сағыу батырлыҡ өлгөһө (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Максимальный балл – 50** | | |

## КРИТЕРИИ ОПРЕДЕЛЕНИЯ ПОБЕДИТЕЛЕЙ И ПРИЗЕРОВ XII СЕВЕРО-ВОСТОЧНОЙ ОЛИМПИАДЫ ШКОЛЬНИКОВ ЗАКЛЮЧИТЕЛЬНОГО ЭТАПА 2021-2022 УЧЕБНЫЙ ГОД ФИЛОЛОГИЯ (БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК, ЛИТЕРАТУРА)

| **Степень диплома** | **Максимальный балл** | **Сумма баллов** | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **8 класс** | **9 класс** | **10 класс** | **11 класс** |
| Диплом I степени (Победитель) | 100 | 80-100 | 80-100 | 80-100 | 80-100 |
| Диплом II степени (Призер) | 100 | 70-79 | 74-79 | 74-79 | 74-79 |
| Диплом III степени (Призер) | 100 | 60-69 | 70-73 | 70-73 | 70-73 |